## ОТБОРОЧНЫЙ (ДИСТАНЦИОННЫЙ) ЭТАП
## 10-11 КЛАССЫ

## ИНСТРУКЦИЯ ПО ВЫПОЛНЕНИЮ ЗАДАНИЙ ПО БАШКИРСКОМУ ЯЗЫКУ

Олимпиадная работа состоит из 50 тестовых заданий. На каждое задание предлагаются четыре варианта ответа, один из которых правильный. На выполнение заданий отводится 1 час 30 минут.

Каждое задание оценивается по 2 балла. Баллы, полученные Вами за выполненные задания, суммируются.

Постарайтесь выполнить как можно больше заданий и набрать наибольшее количество баллов.

Желаем успеха!

### Лексикология

**Задание 1.** Төп башҡорт һүҙен билдәләгеҙ:
1. урман
2. хеҙмәт
3. ғилем
4. тамға

**Задание 2**. Омоним һүҙҙәр бирелгән юлды күрһәтегеҙ:
1. Шатлыҡ, ҡыуаныс, һөйөнөс
2. Йәш кеше, йәш түгеү, биш йәш
3. Шат – бойоҡ, дөрөҫ – ялған
4. Ҡысҡырыу, аҡырыу, тамаҡ ярыу

**Задание 3**. *Уңған – ялҡау, шатлыҡ – ҡайғы* һүҙҙәре мәғәнәләре буйынса ниндәй һүҙҙәр?
1. Омонимдар
2. Антонимдар
3. Фразеологимздар
4. Диалектизмдар

**Задание 4**. *Әсе* һүҙе ҡайһы осраҡта күсмә мәғәнәлә ҡулланылған?
1. Әсе ҡатыҡ
2. Әсе сейә
3. Әсе һут
4. Әсе яҙмыш

### Морфология

**Задание 5.** Һөйләмдәрҙең ҡайһынығында исем төшөм килештә килә?
1. Икмәкте хурлама, ҙурла.
2. Изгелектең иртәһе-кисе юҡ.

3. Ат – туйған ерендә, егет – тыуған илендә.
4. Булыр бала биләүҙән билдәле.

**Задание 6**. Ҡайһы һөйләмдә сама һаны бар?
1. Мостиктың дүрт мөйөшөндә - дүрт матрос.
2. Етеһендә ни булһа, етмешендә шул булыр.
3. Йөҙәрләгән күҙ Закирға төбәлгәйне.
4. Инде өсөнсө йыл һуғыш бара.

**Задание 7.** Килеш категорияһы ниндәй һүҙ төркөмөнә хас?
1. Исем
2. Ҡылым
3. Сифат
4. Киçәксә

**Задание 8**. Күләм-дәрәжә рәүештәрен табығыҙ:
1. Яҡында, бында, алда, йәнәшәлә
2. Шәп, рәхәт, тиҙ, ҡапыл, кинәт
3. Элек, борон, иртән, бая, бөгөн
4. Күп, байтаҡ, өсләтә, саҡ-саҡ

**Задание 9.** *Бара – барһа – барһын – барғым килә.* Ҡылымдың ниндәй формаларына миçалдар бирелгән?
1. Һөйкәлеш формалары
2. Барлыҡ-юҡлыҡ формалары
3. Йүнәлеш формалары
4. Күләм формалары

**Задание 10**. *Айырылған ҡаҙ – тупланған ҡарғаға ем.* Был һөйләмдә ҡылымдың ниндәй төркөмсәһенә миçалдар бар?
1. Исем ҡылым
2. Хәл ҡылым
3. Сифат ҡылым
4. Уртаҡ ҡылым

**Задание 11.** *Болот күтәрелеү менән, көн һалҡынайып китте* һөйләмендә бәйләүестең ниндәй килештән һүң килгәнен билдәләгеҙ:
1. Төп килештән һуң
2. Эйәлек килештән һуң
3. Сығанаҡ килештән һуң
4. Эйәлек килештән һуң

**Задание 12.** Ярҙамсы һүҙ төркөмөн билдәләгеҙ:
1. Исем
2. Ҡылым
3. Теркәүес
4. Сифат

**Задание 13**. Төшөм йүнәлеше ҡылымдары бирелгән юлды күрһәтегеҙ:
1. Һөйләй, йыуа, килә, китә, яҙа
2. Сабырһыҙлана, кейенә, биҙәнә
3. Кейелә, төҙәлә, биҙәлә, уҡыла
4. Эшләтә, яҙҙыра, көлдөрә

**Задание 14.** *Ҡапыл бабайҙың бала булғыһы, шул парталарға ултырып уҡығыһы, елкенеп-елкенеп һөйләгеһе килеп китте* һөйләмендәге ҡылымдар ниндәй һөйкәлеш ҡылымдары?
1. Хәбәр һөйкәлеше
2. Шарт һөйкәлеше
3. Бойороҡ һөйкәлеше
4. Теләк һөйкәлеше

**Задание 15**. *Ҡайҙандыр моңло ҡурай тауышы* *__ишетелә__* һөйләмендә аҫтына һыҙылған ҡылымдың заман формаһын билдәләгеҙ:
1. Шаһитлы үткән заман
2. Шаһитһыҙ үткән заман
3. Хәҙерге заман
4. Билдәле киләсәк заман

**Задание 16**. Теркәүестәрҙе күрһәтегеҙ:
1. Шикелле, аша, хаҡта, һымаҡ
2. Үтә, иң, ифрат, ғына
3. Йәғни, йәнә, шуға, юҡһа
4. Тейеш, кәрәк, икән, бар

**Задание 17**. *Тимербулатты бәләкәйерәк кенә ҡара тумалаҡ атҡа мендерҙеләр* һөйләмендә киҫәксәне табып, уның төрөн билдәләгеҙ:
1. Көсәйтеү киҫәксәһе
2. Һорау киҫәксәһе
3. Раҫлау киҫәксәһе
4. Сикләү киҫәксәһе

**Задание 18**. *__Ах__, ул Юшатыр буйҙары…* һөйләмендә аҫтына һыҙылған һүҙ ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай?
1. Теркәүес
2. Киҫәксә
3. Бәйләүес
4. Ымлыҡ

**Задание 19.***Урман бында бик ҡалын* һөйләменең хәбәре ниндәй һүҙ төркөмөнән килгән?
1. Сифаттан
2. Алмаштан
3. Рәүештән
4. Исемдән

**Задание 20**. Һорау алмаштарын күрһәтегеҙ:
1. Нисә, ҡасан, ниндәй, ҡайҙа
2. Ҡайҙалыр, кемдер, әллә ни, нимәлер
3. Һис кем, бер ни, бер нәмә
4. Үҙем, үҙең, үҙе, үҙегеҙ

**Задание 21**. Составында бүлеү теркәүесе булған һөйләмде билдәләгеҙ:
1. Төн яҡынлап бара, әммә колхозсылар эшкә сығырға ашыҡмайҙар әле.
2. Улар әле береһен, әле икенсеһен бүлеп, шыбырлашып хәбәй һөйләйҙәр.
3. Мин дә юрый уның артынан тәгәрәгән булдым.
4. Иртән дә, көндөҙ ҙә, кис тә ул үҙ урынында ҡалды.

**Задание 22**. Теркәүестәрҙең төрөн билдәләгеҙ: *шуға, шуға күрә, шунлыҡтан.*
1. Сәбәп теркәүестәре
2. Шарт теркәүестәре
3. Йыйыу теркәүестәре
4. Һөҙөмтә теркәүестәре

**Задание 23**. Артыҡлыҡ дәрәжәһендәге сифаттарҙан ғына торған юлды билдәләгеҙ:
1. Ағыраҡ, ҙурыраҡ, ҡыҙылыраҡ, матурыраҡ
2. Йәшерәк, һарғылт, көслө, йәм-йәшел
3. Күм-күк, ифрат көслө, үтә көслө
4. Алһыу, матурыраҡ, оҙонса, ҡып-ҡыҙыл

**Задание 24**. Ҡайһы юлда ҡылым һүҙ төркөмөнә ҡараған һүҙҙәрҙең һорауҙары бирелгән?
1. Кем? Кемдең? Кемгә? Кемде? Кемдә? Кемдән?

2. Нисек? Ҡасан? Ҡайҙа? Күпме? Ни өсөн?
3. Ни эшләй? Ни эшләгән? Ни эшләне?
4. Нисә? Нисәү? Нисәнсе? Нисәшәр?

**Задание 25**. *Ауылды үтеп, бер аҙ барғас, урман* *<u>башлана</u>* һөйләмендә аҫтына һыҙылған ҡылымдарҙың ҡайһыһы - хәл ҡылым, ҡайһыһы – хәбәр һөйкәлеше ҡылымы?

1. *Үтеп, барғас* – хәбәр һөйк., *башлана* – хәл ҡылым.
2. *Үтеп, барғас* – хәл ҡылымдар, *башлана* – хәбәр һөйк.
3. *Барғас* – хәл ҡылым, *башлана, үтеп* – хәбәр һөйк.
4. *Үтеп, башлана* – хәбәр һөйк., *барғас* – хәл ҡылым

## Һүҙьяһалыш

**Задание 26.***Дуҫ-иш, аҙыҡ-түлек, аҡлы-ҡаралы, ер-һыу* һүҙҙәре нисек яһалған?

1. Яһаусы ялғауҙар ярҙамында
2. Һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы менән
3. Һүҙҙәрҙе бәйләү юлы менән
4. Һүҙҙәрҙе парлау юлы менән

**Задание 27**. *Ауылдарҙан* һүҙендә ниндәй ялғау бар?

1. Һан ялғау һәм зат ялғауы
2. Килеш ялғауы
3. Зат ялғауы
4. Һан ялғауы һәм килеш ялғауы

**Задание 28**. Ҡайһы юлда тик тамырҙаш һүҙҙәр бирелгән?

1. Ел, елгәргес, елкән, елһеҙ
2. Бысҡы, бысраҡ, бысҡан
3. Батыр, батырҙарса, батыра
4. Ҡорос, ҡоролоҡ, ҡоростай

## Фонетика

**Задание 29**. Парлы тартынҡылар булмаған юлды һайлағыҙ:

1. б, в, г, ғ, д, ж, з, ҙ
2. п, ф, к, ҡ, т, ш, с, ҫ
3. й, л, м, н, ң, р
4. б, ф, ғ, ҫ, ш, ж

**Задание 30**. Тик һуҙынҡы өндән башланған һүҙҙәр булған юлды һайларға:

1. Ялан, егет, ел, юл
2. Ил, ант, уң, өй, уй
3. Юрға, яңы, оя, эшмәкәр
4. Матур, йәш, гүзәл, күркәм

## Орфография

**Задание 31.** Һүҙҙәр дөрөҫ яҙылған юлды табырға:

1. Аҫрау, бысраҡ, ҡойроҡ, осрау, йомро
2. Аҫырау, бысыраҡ, ҡойороҡ, осорау, йоморо
3. Аҫрау, бысыраҡ, ҡойроҡ, осорау, йомро
4. Аҫырау, бысраҡ, ҡойороҡ, осрау, йоморо

**Задание 32.** Һүҙҙәр тик тартынҡы өндән башланған юлды күрһәтергә:

1. Ялан, егет, ел, юл
2. Ил, ант, уң, өй, уй
3. Юрға, яңы, оя, эшмәкәр
4. Матур, йәш, урау, күркәм

**Задание 33**. Һүҙҙәр дөрөҫ яҙылған юлды табырға:

1. Бойроҡ, айрым, төкрөк, мөңөрәү, төпөрә
2. Бойороҡ, айырым, төкөрөк, мөңрәү, төпрә
3. Бойроҡ, айырым, төкрөк, мөңөрәү, төпрә
4. Бойороҡ, айрым, төкөрөк, мөңрәү, төпрә

**Задание 34**. Һыҙыҡса аша яҙылмаған һүҙ нисәнсе юлда тора?
1. Ағай эне
2. Уй фекер
3. Егет елән
4. Дөрөҫ яуап юҡ

**Задание 35**. *Типһә тимер өҙөрҙәй* фразеологизмына тап килгән яуапты күрһәтергә:
1. Ғәйрәтле
2. Уҫал
3. Мәкерле
4. Ҡара эсле

**Синтаксис**

**Задание 36.** Бер составлы һөйләмдең төрөн билдәләргә: *Ҡаршыла ғына ебәк ҡамыштар менән ҡаймаланған зәңгәр күл.*
1. Эйәһеҙ һөйләм
2. Билдәһеҙ эйәле һөйләм
3. Билдәле эйәле һөйләм
4. Атама һөйләм

**Задание 37**. *Тышта һалҡынса, һауа шундай саф, иртәнге һүлпәнлекте, әйтерһең, ҡул менән һыпырып алып ташланылар* һөйләме нисә һөйләмдән тора?
1. Өс
2. Дүрт
3. Ике
4. Биш

**Задание 38.***Нимә оҡшай (?) шуны йырла* һөйләмендә эйәрсән һөйләмдән һуң ниндәй тыныш билдәһе ҡуйыла?
1. Ике нөктә
2. Һыҙыҡ
3. Өтөр
4. Тыныш билдәһе ҡуйылмай

**Задание 39.***Йылы һүҙ йыланды ла өңөнән сығара* һөйләмендә төшөм килештәге һүҙ һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килгән?
1. Тултырыусы
2. Аныҡлаусы
3. Хәл
4. Хәбәр

**Задание 40.***Башҡорттарҙың 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыуҙары хаҡында күп кенә тарихи документтар һаҡланһа ла, Ҡаһым түрә тураһында документтар бик аҙ.* Эйәрсән һөйләмдең төрөн билдәләргә:
1. Шарт
2. Кире
3. Сағыштырыу
4. Тултырыусы

**Задание 41**. Түбәндәге һөйләмдәрҙең ҡайһыһы ябай һөйләм?

1. Китаптар яратҡан, матур әҙәбиәт менән мауыҡҡан йәш кеше ижад эшенә лә тартылмай ҡалмайҙыр ул.

2. Тәрән йөкмәткеле һәм оҫта яҙылған әҫәрҙәр менән танышыу күңелдәребеҙгә һәр саҡ ләззәт һәм шатлыҡ килтерә.

3. “Урал” – киң таралған тарихи йыр.
4. Бөтәһе лә ябай һөйләм.

**Задание 42.**_Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!_ һөйләмендәге тыныш билдәләренең ҡуйылышын аңлатырға:

1. Тиң киҫәктәр, инеш һүҙ эргәһендә
2. Тиң киҫәктәр, инеш һөйләм
3. Тиң киҫәктәр, өндәш һүҙ
4. Дөрөҫ яуап юҡ

**Задание 43.** Ябай һөйләмдәр бер-береһе менән ниндәй мәғәнә мөнәсәбәтендә тора: _Оло Эйек буйын ҡуйы күк томан ҡапланы, таң атты, ҡояш сығырға яҡынлашты._

1. Бер үк ваҡытта булған ваҡиғаларҙы белдерә
2. Бер-береһенә ҡаршы ҡуйыла торған ваҡиғаларҙы
3. Бер-бер артлы булған күренеш, хәл-ваҡиғаларҙы
4. Бер-береһен асыҡлап килә

**Заданием 44**. _Самолет килгәнде хәбәр иттеләр_ һөйләменең төрөн билдәләргә:

1. Ябай
2. Ике составлы
3. Бер составлы
4. Ҡушма

**Задание 45.**_Председателдән берәүҙәр бер нәмә һорай, икенселәр икенсе нәмә таптыра_ һөйләменең эйәләре ниндәй һүҙ төркөмөнән килгән?

1. Исем
2. Алмаш
3. Һан
4. Мөнәсәбәт һүҙ

**Задание 46**. Һөйләмдең ниндәй киҫәктәре тиң булып килгән: _Ул маяҡтарҙы кешеләр ҡулы ҡоҡандыра, йәғни кешеләр уларға үҙҙәренең аҡыл йылыһын, рух йылыһын, өмөт нурҙарын һалып ҡалдыралар._

1. Эйәләр, хәлдәр
2. Хәбәрҙәр, аныҡлаусылар
3. Тултырыусылар
4. Хәбәрҙәр, тултырыусылар

**Задание 47**. Эйәрсән һөйләм баш һөйләмгә нисек бәйләнгән: _Беҙ, хәрби ҡатын-ҡыҙҙар, Ләйлә тыуған көнөндә бер генә тапҡыр булһа ла кейеп ҡараһын тип, уға аҡ ситсанан бик матур күлдәк тектек._

1. Бәйләүес ярҙамында
2. Теркәүес ярҙамында
3. Киҫәксә ярҙамында
4. Ялғау ярҙамында

**Задание 48.** Ҡайһы һөйләмдә ябай һөйләмдәр үҙ-ара эйәртеүле юл менән бәйләнгән?

1. Тегеләр ҙә беҙҙе күрҙе, урындарынан торҙолар, боролдолар, ҡаса башланылар.
2. Кеше күҙендәге сүпте күргәнсе, үҙ күҙеңдәге бүрәнәне алып ҡуй.
3. Кешене бер алдаһаң, ышанмаҫ.
4. Бик һағынған, күрәһең, һөйләп һүҙе бөтмәй.

**Задание 49**. Бирелгән ҡушма һөйләмдә нисә ябай һөйләм бар: _Ахыр Емеш иҫенә килде, күҙен асты, берсә ул еңгәһенә ҡараны, берсә Байрасы, уға ҡарап, тәрән итеп тын алды._

1. Ике
2. Өс
3. Дүрт
4. Был ябай һөйләм.

**Задание 50**. Урын хәле булған һөйләмде күрһәтегеҙ:
1. Далала төрлөһө була.
2. Ыҙғыр көҙ етте.
3. Ҡуян булып ҡасҡансы, ыласын булып үлеү артығыраҡ.
4. Һөйәктәргә тиклем өшөгән бар, еләктәргә тиклем туңған бар.